

# Яҡтылыҡ йырсыһы



# Дәрестең маҡсаты:

- Шағирҙың тормош юлын, ижадын өйрәнеү;
- М. Аҡмулланың халыҡ тормошонда, әҙәбиәт тарихында тотҡан урынын билдәләү;
- уҡыусыларҙа Аҡмулла ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу;
- балаларҙы арҙаҡлы шәхестәр өлгөһөндә тәрбиәләү.

## Өйгә эште

## тикшереү



Һорауҙар:

1. М.Аҡмулла ҡайҙа һәм ҡасан тыуа?
2. Аҡмулланың ысын исем-шәрифе?
3. Башланғыс белемде ҡайҙа ала?
4. Шағир ниндәй мәҙрәсәләрҙә уҡый?
5. Тыуған йортонан ни сәбәпле сығып китә?
6. Үҙе менән нимәләр ала?
7. Белемен камллаштырыу өсөн ҡайҙарҙа эшләй?
8. Аҡмулла исемен кемдәр ни өсөн бирә?
9. Шағирҙың исеме нисек мәңгеләштерелә?
10. Аҡмулланы ниндәй шағир тибеҙ?

# Яуаптар:

1. 1831 йылда Миәкә районы Туҡһанбай ауылында.
2. Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов.
3. Үҙ ауылында атаһынан.
4. Мәнәүезтамаҡ, Әнәс, Стәрлебаш,Ырымбур,Троицк мәҙрәсәләрендә
5. Үгәй әсәһе ҡыйырһыта.
6. Ат, арба, китаптар, эш ҡоралдары.
7. Ҡаҙаҡ балаларын уҡыта, балта оҫта була.
8. Ҡаҙаҡтар, тура, ғәҙел һүҙле, аҡыллы булған өсөн.
9. 1989 йылда Аҡмулла исемендәге премия булдырыла;

- Өфөләге юғары уҡыу йортына исеме бирелә;
- Халыҡ – ара “Аҡмулла уҡыуҙары”,
- Республикала “Аҡмулла вариҫтары” бәйгеһе үткәрелә;
- Туҡһанбайҙа йор-музейы асыла;
- Өфөлә һәйкәл асыла һ.б.
- 10. Мәғрифәтсе шағир.

# Исемен мәңгеләштереү


















# Эпиграф:

Башҡорттарым,

уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!

М.Аҡмулла.

# Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!



- Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк

- Илтифат ит: уҡыуҙалыр шәрафәттәр,
Яһиллектән килә ятыр ҙур афәттәр.
Уҡығандар күктә осор, һыуҙа йөҙөр,
Юҡтыр унда әүлиәлек, кәрамәттәр.

- Уҡығанға был донъяла жәләл булыр,
Харам тигән күп шәйҙәр хәләл булыр.
Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр

- Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай,
Сәғәтте алға бороп, төн көн булмай.
Белемлелек — арыҫландан көслө батыр,
Шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай.

# Һүҙлек эше:

- Илтифат ит – иғтибар ит, бел
- шәрәфәт - хөрмәт, почет
- яһиллыҡ- аңһыҙлыҡ, наҙанлыҡ
- Афәт – бәлә-ҡаза
- Әүлиә – күрәҙәсе, тылсым эйәһе
- Кирамәт -тылсым
- жәләл –яҡты нур, йәм
- харам – ярамаған әйбер

  хәләл – рөхсәт ителгән

## Шиһабетдин Мәржәни

## мәрҫиәһе”

Ҡараңғыла фонарҙе ҡабыҙған ул,
Ҡайнар һөткә һары майҙы
тамыҙған ул.
Сәләмәтлек шишмәһенән юлдар
асып,
Хәҡиҡәт йылғаларын ағыҙған ул.







# Үҙ аллы эш.

Китап һүҙен боҙоп әйткән боҙоҡ мулла
Өҫтөн сығыр унан да, бурлыҡ ҡылһа.
Аҡмулла күпте күреп һырғалаған,
Һәр ерҙә наҙандарҙы ҡуҙғалаған.

Булмайыҡ дүрт аяҡлы мал шикелле,
Ҡыуарған япраҡһыҙ тал шикелле.
Баҡсалай, егет әҙәм күркәмләнә,
Ғилем менән һүҙ һөйләһә, бал шикелле.

Аҙ ғына дәресем бар ҡыш ваҡытта,
Китап ҡарау-гәҙәтебеҙ буш ваҡытта.
Безгә лә ғилем бите ябылған юҡ,
Аңлайбыҙ кәйеф килгән хуш ваҡытта

Тормошо башҡа илдәрҙең көн шикелле,
Тормошо наҙан илдең төн шикелле.
Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ. Мейегә һалып:
Күренә ошо ере миң шикелле.

Хәл етһә, төрлө фәнде күргән яҡшы,
Камилдәр ҡатарына кергән яҡшы.
Русса уҡып ҡына түгел белмәк,
Хәл килһә, французса белгән яҡшы

Һәр ҡайҙа хәлең харап, булһаң наҙан
Йоҡонан баш күтәрер зирәк әҙәм.
Башҡа йорт, ғилем эҙләп талпыныуҙа,
Һис юҡтыр ер йөҙөндә беҙҙән яман.

Бер күреүҙә белмәҫһең ирҙең серен,
Мәғрифәт юлында һал күҙең ҡырын.
Күпме өгет әйтһәң дә наҙанға һин,
Фекерләп, [illegible]ынға алмаҫ меңдән берен.

Егеттәр, хәбәрҙәр бул замананан,
Һыйырҙан артыҡ түгел наҙан әҙәм.
Ниңә беҙ хур булабыҙ башҡа йорттан –
Беҙ ҙә бит тыуып үҫтек ата-ананан.

# Төркөмдәрҙә эш

1 төркөм –фишбоун,

2 төркөм –

синквейн

эшләй

# Белем, уҡыу тураһында мәҡәлдәр:



- Уҡыу-энә менән соҡор ҡаҙыу;
- Уҡыған- ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан;
- Китап –белем шишмәһе;
- Көслө берҙе йығыр, белемле меңде йығыр;
- Белеме барҙың ҡәҙере бар;
- Йәш саҡта уҡыу-ташҡа яҙыу, ҡартайғас уҡыу-боҙға яҙыу;



# Өйгә эш:

1. “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк..!”

шиғырын ятларға;

2. Ижади эш.

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!” шиғырын әҙәп, тәрбиә темаһына ярашлы үҙгәртергә.

3. Һәләтле уҡыусылар өсөн:

М.Аҡмулла ижады буйынса

киносценарий яҙырға.



# Баһалар:

- өйгә эш,
- дәрестә ҡатнашыу,
- төркөмдәрҙәге эш өсөн дөйөм ҡуйыла

